■ Шиғри тулҡында

**Фәриҙә АЙЫТБАЕВА,**
*Бөрйән районы*

## ДУҪЫМА

*Тормошом - шау сәскә, тиеп ҡыуанма,*
*Өйөм бар, тип, ғаиләм бар, тип алданма,*
*Был донъяға ҡунаҡ булып килгәнһең,*
*Ваҡытлыса был тәнеңә ингәнһең.*
*Донъялағы бар ниғмәттәр - алдатҡыс,*
*Ялтырауыҡ, күҙ буяғыс, йыуатҡыс,*
*Шулар, тиеп янып-көйөп йөрөмә,*
*Ҡояш зәүүәлде үтте, баҫ өйләгә.*
*Алла булһын һәр ваҡыт күңелеңдә,*
*Алла, тип типһен һинең йөрәгең дә.*
*Күңелеңдән иман нуры китмәһен,*
*Ваҡыттарың һис заяға үтмәһен.*
*Бисмилла, тип башла һәр саҡ эшенде,*
*Шайтан аулар бисмиллаһыҙ кешене.*
*Йөрәгеңә һеңә барһын бар доға,*
*Ала күрмә Алланан һин бәддоға.*
*Һаҡ бул берүк, яҙып, ҡуйма имандан,*
*Аҙашыуҙар, яңылышыуҙар бик яман.*
*Аллаһ һынап торор һине һәр ваҡыт,*
*Мәсет юлын ҡалдырмайса таҡыр ит.*
*Лә иләһә илләллаһ, тип атһын таң,*
*Собханалла, күңелең булмаһын тар.*
*Донъя ҡыуып, мал баҫтырып йәшәмә,*
*Алып китмәҫһең тегендә һис нәмә.*
*Әруахтарға, именлеккә, ил-йортҡа*
*Һәр саҡ биреп тор һин хәйер-саҙаҡа.*
*Пәрҙә булыр, ҡалҡан булыр афәттән,*
*Хур булмаҫһың бындай ғөрөф-ғәҙәттән.*
*Килер бер саҡ - һуңғы һулыш, һуңғы өн,*
*Фанилыҡта йәшәй торған һуңғы көн.*
*Фәрештәләй ҡанатланып китерһең,*
*Баҡыйлыҡҡа, үҙ доньяңа күсерһең.*
*Шул сағында әйләнерһең артыңа...*
*Ә артында - хәйер-саҙаҡа, доға...*
*Ҡыуанырһың: "Буш ҡул түгел, Хоҙайым,*
*Ярлыҡасы, кисер, тиеп һорайым.*
*Әл дә генә уҡығанмын намаҙын.*
*Хәйер биргәнмен әл дә аҙна һайын,*
*Баҡыйлыҡта әруахтар кенә тотмаҫ,*
*Ожмах ишектәре миңә ябылмаҫ..."*
*Шулай булһын инде, дуҫым, иншәьАллаһ,*
*Ярлыҡаһын, кисерһен беҙҙе Аллаһ.*
*Тик шуныһы, дуҫ тигәнем - мин үҙем,*
*Әйткәнем дә - үҙемә әйтер һүҙем.*

■ Ғилем һәм ғәмәл

## ДОҒА ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

**Саҙаҡаларға доға ҡылыу**

Эй, Раббым! Үҙеңдең ризалығынды өмөт итеп, пәйғәмбәребеҙҙең шәфәғәтен өмөт итеп, Ислам диненең алға барыуын өмөт итеп биргән был кешеләрҙең хәйер-саҙаҡаларын киң рәхмәтең менән ҡабул итһәң ине.

Аллаһ ризалығы өсөн биргән саҙаҡаларығыҙҙы Аллаһ Тәғәлә уйламаған ерҙән ҡайтарып, киң ризыҡтар, хәләл малдар, ләззәтле тағәмдәр ирештерһә ине.

Аллаһ ризалығы өсөн биргән саҙаҡаларығыҙ хәйер биргәндә күңелегеҙҙә ниндәй изге морат-маҡсаттарығыҙ булһа, хәйерле, изге морат-маҡсаттарығыҙға ирешергә насип булһа ине.

Аллаһ ризалығы өсөн биргән саҙаҡаларығыҙ өсөн Аллаһ Тәғәлә һеҙгә йомартлыҡ дәрәжәһе биреп, ҡиәмәт көнөндә үҙ малығыҙ булһа ине, үҙегеҙҙе ҡаршы ала торған нур булып, тамуҡ утына пәрҙә булһа ине.

Эй, Раббым! Ошо саҙаҡа биреүселәрҙе афәттәрҙән һаҡла һәм уның малдарын арттыр һәм хәйерле маҡсаттарына ирештер, уның гонаһтарын ғәфү ҡыл, уның иманын ҡеүәтлә. Әмин.

Раббәнә әтинә фиддүнйә хәсәнәтән үә фил-әхирати хәсәнәтән үә ҡыйнә ғәҙәбәннәр.

**Саҙаҡаларға ҡыҫҡаса доға ҡылыу**

Эй, Раббым! Ошо саҙаҡа биреүсене афәттәрҙән һаҡла һәм уның гонаһтарын ғәфү ит; уның иманын ҡеүәтлә; уның малдарын арттыр, хәйерле, изге маҡсаттарына ирештер.

Берәй урында Ҡөрьән мәжлесе бөткәндән һуң был доғаны ҡылып, мәжлесте йомғаҡлап ҡуйыу ҙа күркәм булыр:

Эй, Раббым! Ризыҡландыр һин беҙҙе бәләләндермәгән хәлдә.

Динебеҙҙе алып барырға насип ит - тәкәбберләнмәгән хәлдә.

Изге ғәмәлдәребеҙҙе рияһыҙ ғәмәлдәрҙән ҡыл.

Беҙҙе ғазапланмаған хәлдә ғәфү ит.

Беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡа.

Беҙҙе хисапһыҙ (һорауһыҙ) йәннәтеңә керетһәң ине һәм дидарынды пәрҙәһеҙ күрергә насип итһәң ине.

Эй, Раббым! Тәүбәләребеҙҙе ҡабул ҡылған ҡолдарыңдан ит. Эй, Раббым! Беҙҙе үлгән һуңында ғаҙап ҡылма, үлем хәлдәрен еңел ит. Әмин. (Доғаларыбыҙҙы ҡабул ҡыл).

**(Аҙағы).**
**"Дәғүәт" нәшриәте.**



## КӨН ХӘҘИСЕ

Кем һүҙен сәләм биреүҙән башлай, шул - Аллаһы Тәғәләгә һәм Уның Рәсүленә иң яҡын кеше.

Кем һуҡырҙы ҡырҡ аҙым ер етәкләп илтә, шуға Йәннәт уажиб (тейеш).

Нисек кенә булмаһын, һаранлыҡ тигән ауырыу - иң ауыр сир.

Берәү доғалары ҡабул булыуын һәм ҡайғылары таралыуын теләһә, ауырлыҡта йәшәүсенең хәлен еңеләйтһен.

**Шәйехзада БАБИЧ**

*Нәфсе - шайтан, бик яуыз ул,*
*һәр әҙәмде аҙҙыра,*
*Аҙҙыра торғас, наҙандарҙы*
*юлынан яҙҙыра.*
*Әммә унан да яуыз бер нәмә*
*бар, ул - эскелек,*
*Ул халыҡты йорт-еренән*
*һәм диненән яҙҙыра.*

***1914.***

## ЙОМА НАМАҘЫ

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (с.ғ.с.) әйткән: "Әгәр ҙә кеше тулыһынса ғөсөлләнеп, йома намаҙына алдан барып ултырһа, мәсеттә булған тәүге сәғәтендә ул Ҡорбанға дөйә салған әжерен алыр. Был көндө имам мөнбәргә сығыу менән бәндәләрҙең Аллаһты зекер итеүен тыңлау өсөн фәрештәләр килеп етер. Йома һеҙгә бирелгән көндәрҙең яҡшыларҙан яҡшыһы, был көндө минең өсөн дә доғаны йышыраҡ ҡылығыҙ. Һеҙҙең был доғаларығыҙ, һис шикһеҙ, миңә лә етеп торор". "Эй, Аллаһ илсеһе, беҙҙең теләктәребеҙ нисек итеп һиңә барып етер, Һин бит ул ваҡытта сереп тупраҡҡа әйләнгән булаҫаҡһың", - тигән сәхәбәләр. "Ҡөҙрәт һәм бөйөклөк эйәһе Аллаһ Пәйғәмбәрҙәр тәнен ергә хәрәм итте", - тип яуаплаған Пәйғәмбәр (с.ғ.с.).

Тейешенсә ғөсөлләнеп пакланғандан һуң йома намаҙына килеп, тын ғына, тыныс ҡына имамды тыңлап торған кешенең ике йома араһында һәм унан һуң тағы ла өс көн дауамында ҡылған гонаһтары ярлыҡана, ә инде йома намаҙы ваҡытында ул аяҡ аҫтындағы таштарҙы барлап ултырһа, ул ваҡыт заяға үткәрелгән булыр.

Шуға ла Аллаһ : "Эй, иман килтергән бәндәләр! Йома көндө намаҙға саҡырылыу менән Аллаһты зекер итергә ашығығыҙ һәм алыш-биреште ҡалдырып тороғоҙ. Белегеҙ килһә, был эш һеҙҙең өсөн хәйерлерәк. Намаҙ тамамланыу менән үҙ мәнфәғәттәрегеҙҙе үтәү һәм Аллаһтың рәхмәтен кәсеп итеү өсөн ер өҫтөнә таралығыҙ. Күңелегеҙ һәм телегеҙ менән Аллаһты бик йыш зекер итеп тороғоҙ. Шул ваҡытта ғына һеҙ, ихтимал доньяла ла, ахирәттә лә изгелек табырһығыҙ", - тигән.

Хәҙистәрҙә лә әйтелгәнсә, йәһүдтәргә - шәмбе, насраниҙарға - йәушәмбе, мосолмандарға йома көн бүләк итеп бирелгән. Мосолмандарға был көндө игелек-изгелектәр яуып тора. Йома унан алдағы кесе йома көндө ҡояш менән башлана һәм йома көн ҡояш байыу менән тамамлана.

**Дәүләкән мәсете**
**яҙмаларыннан.**

## САЛАУАТ ӘЙТЕРГӘ ОНОТМА



Шәйех Сәйед-әфәнденең шундай һүҙҙәре бар: "Йәннәттең нигеҙен Пәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) нуры тәшкил иткәнгә күрә, Йәннәт беҙ әйткән салауатҡа ярашлы киңәйә. Салауат шайтандың ҡотоҡоһон да яндыра. Салауатта яҡшы эштәрҙе юҡ итә торған риялыҡ юҡ. Шуға күрә салауатты ҡысҡырып тә әйтергә мөмкин, хата көйләп тә, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) быға риза буласаҡ. Ҡиәмәт көнөндә Хаҡ Тәғәлә ҡаршыһында хисап биргәндә салауат яҡшы ғәмәлдәрҙән күберәк булған алама ғәмәлдәрҙе йәшерәсәк. Хозурһыҙ (йөрәктең күндәмлеге һәм сабырлығы) ғибәҙәттең файҙаһы аҙ, ә хозурһыҙ салауат уҡыу ҙа файҙа килтерә. Әйҙәгеҙ һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) өсөн шундай ҡайбатлы ғибәҙәт ҡылайыҡ. Ул әйтеүгә бик еңел, ә әжере шул тиклем бөйөк".

■ Сәләмәтлек

## *Ҡиммәтле гранат*

Был йоморо емештең исеме латин телендәге "гранатус" һүҙенән килеп сыҡҡан, һәм ул "ярмалы" тигәнде аңлата. Гранаттың ҡаты ҡабығы аҫтында урынлашҡан һутлы рубин ярмалары үтә күренмәле, гүйә, эстән нурланып торғандай ялтырауыҡ ҡиммәтле таштар һибелмәһе. Ҡыҙыл төҫтәге минералға - ҡиммәтле гранат ташына исем биреүгә нәҡ гранат ярмалары сәбәпсе була ла инде.

Гранат (анар) - кешелек ҡулланған тәүге емештәрҙең береһе. Үҫемлектең тыуған ере тип Персия иҫәпләнә. Әммә быны иҫбатлаған аныҡ ҡына дәлилдәр юҡ. Шуныһы бәхәсһеҙ, гранат - Азия емеше. Боронғо дәүерҙәрҙә үк ул Урта Диңгеҙ, Һиндостан һәм Мысырҙа тарала. Боронғо Мысырҙа һәм Вавилонда гранаттың мөғжизәле үҙенсәлеккә эйә икәнлегенә ышанғандар. Вавилондар яу алдынан гранат ярмаларын сәйнәгән кешене дошман күрмәйәсәк, тип иҫәпләгән. Ә боронғо Мысыр фирғәүендәрен ерләгәндә, кире әйләнеп ҡайтыуға өмөт билдәһе булараҡ, эргәләренә гранат емештәрен һалғандар. Шәреҡтә элекке замандарҙан уҡ гранатты виноград һәи инжир менән бер рәттән баһалағандар. Ҡөрьәндә анар өс тапҡыр телгә алына ("әл-Әнғәм" Сүрәһе, 6,99; "әл-Әнғәм" Сүрәһе, 6-141; "әр-Рахман", 55-68 - икәүһендә Аллаһы Тәғәләнең бар нәмәне барлыҡҡа килтереүе тураһында миҫал килтерелә, һәм бер тапҡыр уның Йәннәт баҡсаларында үҫеүсе емеш икәнлеге әйтелә. Мәҫәлән, "әл-Әнғәм" сүрәһендә: "Ул - Күктән һыу төшөрҙө һәм һыу арҡаһында Беҙ төрлө нәмәләрҙе үҫтерҙек; "Беҙ шул һыуҙарҙан үҫемлектәр үҫтерҙек, уларҙан теҙелеп ултырған орлоҡтар сығарасаҡбыҙ; һәм хөрмә ағасынан емешле тәлгәштәр: һәм йөҙөм ағасынан баҡсалар сығарабыҙ: һәм зәйтүнде һәм анарҙы - оҡшаш һәм оҡшаш түгелдәрен. Емеш биргән саҡта быларҙың емештәренә һәм уларҙың өлгөрөп бешеүҙәренә ҡарағыҙ! Ысынлап та, иман килтергән кешеләргә бында аяттар бар!"

Изге Китапта гранатҡа урын юҡҡа ғына бирелмәгән.

Бик үк бейек булмаған был ботаҡлы ағасты тәрбиәләүҙә әллә ни иғтибар кәрәкмәй, ул тупраҡҡа талымһыҙ, елгә бирешмәй, сыҙам, оҙайлы эҫе йәйгә лә, ҡышҡы 9-12 градус һалҡындарға ла бирешмәй һәм йәшел япраҡтары араһында алһыуланып күренгән сәскәләре, артабан сөм-ҡыҙыл төҫтәге фонарға оҡшаш емештәре менән ҡыуандырып, йыл һайын уңыш бирә.

Гранаттың һутлы ярмалары тәмле лә, шифалы ла. Уны медицинала беҙҙең эраға тиклем үк ҡулланғандар. Гиппократ ашҡаҙан ауыртҡанда - гранаттың һутын, ә эс киткәндә ҡабығын ҡайнатып эсергә, шуның менән тән яраларын да йыуырға тәҡдим иткән. Ғәрәптәр элек-электән гранат менән ашҡаҙан-эсәк юлдарын һәм баш ауырыуҙарын дауалағандар.

Бөгөн дә был үҫемлектең төрлө өлөшө күп ауырыуҙарға шифа булып тора.

Бер гранат емеше ашаған кеше үҙенең бер тәүлеккә тейешле С витаминына булған ихтыяжының 40 процентын ҡәнәғәт-ләндерә. Грнат емештәре тимергә ифрат бай, шуға ла табиптар уны аҙ ҡанлылыҡ менән яфаланыусыларға тәҡдим итә. Шулай уҡ был емештә ҡан яһауҙа ҡатнашыусы, эритроциттар һәм лейкоциттарҙың барлыҡҡа килеүен әүҙемләштереүсе фолий кислотаһы ла бар. Гранат - йөклө һәм бала имеҙеүсе ҡатындар өсөн бик мөһим аҙыҡ.